*Мәүлит ЯМАЛЕТДИН*

# Орхон руник яҙмаларында тарихи-мәҙәни катлам

Орхон-Йәнәсәй ташъяҙмалары төрки халыҡтарҙың тарихҡа әлегә билдәле булған иң боронғо яҙма әҙәби ҡомартҡылары булып һанала. Улар донъя фәненә руна (шына) яҙыуы исеме аҫтында ҡабул ителгән үҙенсәлекле яҙмала килеп еткән. Улар тәү башлап 1696-1722 йылдар арауығында Йәнәсәй йылғаһы буйында урыҫ ғалимы С.Ремезов, швед ғалимы Ф.Страленберг, аҙағыраҡ, 1889 йылда Монголиялағы Орхон йылғаһы буйында Н. Ядринцевтар тарафынан табылған. Ҡомартҡыларҙың исеме лә атап үтелгән ике йылғаның атамалары буйынса Орхон-Йәнәсәй яҙмалары тип йөрөтөлә.

Боронғо төрки ташъяҙмаларының донъя фәненә билдәле булыу тарихында ла бәхәсле урындар етерлек, әлбиттә. О.Сөләймәнов, мәҫәлән, уларҙың асылыу тарихын Полтава һуғышында әсирге алынып, Себер һөргөнөнә ебәрелгән швед офицеры менән бәйләй. Йәнәһе, һөргөндә саҡта әлеге офицер ташҡа ырып яҙылған ғәжәйеп ҡомартҡыларға тап була һәм уларҙың үҙҙәренә ут күрше булған финуғыр халыҡтарының мәҙәниәтенә мөнәсәбәте булыу ихтималлығынан сығып, табыш хаҡында Европа ғалимдарына хәбәр итә. Себерҙе яулап алғандан һуң 150 йыл буйы Рәсәй ғалимдарының ташъяҙма ҡомартҡыларға ҡарата иғтибарының юҡ дәрәжәһендә булыуын уйлаһаң, О.Сөләймәнов фекерендә лә хаҡлыҡ барлығына ышанаһың. Нисек кенә булмаһын, Орхон-Йәнәсәй руник яҙмалары бынан өс йөҙ йыл элек асылған, улар хәҙер төрки халыҡтарының ғына түгел, ә бөтөн донъя халыҡтарының ҡаҙанышы рәтендә торған рухи гәүһәрҙәр.

Шуны ла әйтеп китергә кәрәк: Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡыларының тексын йөҙ йылға яҡын уҡый алмай аҙапланалар. Ниһайәт, 1894 йылда Дания ғалимы В.Томсен менән урыҫ тюркологы В.Радлов икеһе бер үк йылда ташъяҙмаларҙың серен асалар. Ана шунан бирле Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡылары, төрки халыҡтарының уникаль яҙма әҙәби мираҫы һәм бөтөн донъя мәҙәни күренеше булараҡ, тюрколог ғалимдарҙың даими иғтибар үҙәгендә.

Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡыларының тикшерелеү мәсьәләһенә килгәндә, шуны билдәләп үтергә кәрәк: улар бөгөнгө көндә тел йәһәтенән күберәк өйрәнелгән. Айырым алғанда, Н.А.Баскаков, В.М.Насилов, С.Аманжолов, И.А.Батманов, В.Г.Кондратьев, С.Е.Малов, А.А.Леонтьев, Н.Я.Бичурин, В.А.Лившиц, В.А.Никонов кеүек ғалимдарҙың һәр береһе ҡомартҡы тексын төрлө позициянан тороп тикшереүгә һиҙелерлек өлөш индергәндәр. Ташъяҙманың Белге ҡағанға, Күлтәгингә, Тоньоҡуҡҡа ҡағылышлы өлөштәренең поэтикаһын тикшереүгә күп көс һалған И.В.Стеблева, Е.Д.Поливановтарҙың хеҙмәттәре лә етди иғтибарға лайыҡ.

Ҡомартҡыларҙы тел йәһәтенән тикшергән ғалимдарҙың төп фекерҙәре шуға ҡайтып ҡала: Орхон-



10-2001.p65 117 02.11.01, 15:25

Йәнәсәй руник яҙмаларының теле хәҙерге барлыҡ төрки телдәрҙең дә нигеҙен тәшкил итә, уларҙың һәр береһендә боронғо төрки ташъяҙмаларының эҙен күрергә мөмкин. Урыҫ тюркологы С.Е.Малов, мәҫәлән, ошоға бәйле фекерен илленсе йылдарҙа уҡ былай тип белдергән: «Бөтә был ҡомартҡылар һәм уларҙың теле күпселек төрки телдәрҙең боронғо тарихы өсөн уртаҡ тарихи ерлек булып хеҙмәт итә». Күренекле ҡырғыҙ ғалимы И.А.Батмановтың фекере лә ошоноң менән ауаздаш: «Барлыҡ төрки телдәрендә лә теге йәки был дәрәжәлә боронғо руник яҙмалағы ҡомартҡылар теле менән күп кенә оҡшашлыҡтар һаҡланып ҡалған».

Был йәһәттән башҡорт телсе-ғалимдары ла ҡалышмай, улар ҙа Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡылары теленә башҡорт теленең мөнәсәбәте, бәйләнеше мәсьәләһенә ҡағылышлы хеҙмәттәр яҙҙы. Мәҫәлән, М.Ә.Әхмәтов үҙенең «Глагол в языке Орхоно-Енисейских памятников» (1978) тигән хеҙмәтендә Орхон-Йәнәсәй ташъяҙмаларындағы ҡылым формаларын өйрәнә һәм был ҡомартҡыларҙағы ҡылым төрҙәренең күбеһе хәҙерге башҡорт телендә лә һаҡланыуын, башҡорт теленең, башҡа төрки телдәре менән бер рәттән, үҙенең тамырҙары менән Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡыларына барып тоташыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Орхон-Йәнәсәй яҙмаларын әҙәби әҫәр булараҡ тикшереү буйынса ла хеҙмәттәр юҡ тип әйтеп булмай. Уларҙың характеры, тематикаһы, формаһы, тел-стиль үҙенсәлектәре хаҡында шаҡтай ҡыҙыҡлы фекерҙәр әйтелгән фәндә. Ғалимдарҙың бер төркөмө, мәҫәлән, В.М.Жирмунский, Орхон-Йәнәсәй ташъяҙмалары сәсмә формала яҙылған тип һанаһа, икенсе төркөмгә ҡараған әҙәбиәт белгестәре ҡомартҡылар шиғри ҡалыпта яҙылған, тигән фекерҙә тора. Мәҫәлән, академик Ф.Е. Корш беренсе булып Күлтәгингә арналған Кесе яҙманың һуңғы өлөшө дүрт юллы шиғыр менән яҙылыуына иғтибар иткән. Һуңғараҡ А.Н.Бернштам яҙмалағы шул уҡ стилде урыҫ былиналарының яҙылыу стиленә оҡшата. Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡыларын өйрәнеү эшенә һиҙелерлек өлөш индергән И.В.Стеблева хатта ташъяҙмаларҙағы шиғыр төҙөлөшөнөң ямб һәм анапест үлсәмдәренең аралашып килеүенән ғибәрәт икәнен асыҡлап үтә. Унан тыш, шул уҡ И.В.Стеблева үҙенең «Развитие тюркских поэтических форм в XI веке» тигән хеҙмәтендә боронғо төрки ҡомартҡыларының әҙәби традицияларын һуңғыраҡ осорҙа ижад ителгән «Диуан лөғәт әт-төрк» һәм «Ҡотаҙғу белек» әҫәрҙәре менән сағыштырып, уларҙағы байтаҡ уртаҡ һыҙаттарға иғтибар итә һәм бик ҡыҙыҡлы һығымталар яһай. Мәҫәлән, Орхон-Йәнәсәй яҙмалары менән «Диуан лөғәт әт-төрк» араһындағы тематик бүлектәрҙең ауаздашлығына иғтибар йүнәлтелә: икеһендә лә үлгәндәр иҫтәлегенә һыҡтау, героик мотивтар, өгөт-нәсихәт, мифологик һәм хәрби ҡатлам ҙур урын алып тора. Хеҙмәттә шулай уҡ ике әҙәби мираҫтағы шиғыр төҙөлөшө, атап әйткәндә, ижектәр һаны сағыштырыла. Ошо унай менән автор бындай һығымтаға килә: «'Ҡотаҙғу белек»тәге ун бер ижекле шиғыр юлдары менән Орхон-Йәнәсәй тексындағы ун бер ижекле юлдарҙы сағыштырыу уларҙың структураһындағы берҙәйлекте күрһәтә».

Күрһәтелгән хеҙмәттә Орхон-Йәнәсәй яҙмаларындағы шиғри юлдарҙың рифмалашыу мәсьәләһе лә ярайһы яҡтыртылған. Миҫал өсөн ҡомартҡылар тексынан бер нисә өҙөк килтереп үтәйек:

Ҡаған ат бунта биз бирмитиз
Синлим ҡунчуйыг биртимиз
Өзи йаңылты ҡаганы өлти
Будуны күң ҡул болты
(аабб рифмаһы)
Аны субуғ баралым
Ол суб ҡоды бардымыз
Санағ алы түсүртимиз
Атығ ыҡа байур әртимиз
(аабб рифмаһы)
Түрк будун йәмә булғанч
ол тимис
Огузы йәмә тарканч ол тимис
(аа рифмаһы, ол тимис — рәдиф).
Сү баруң тиди

Алтун йызда олуруң тиди
Сү басы Инәл ҡаған
Тардуш шад барзун тиди
(ааба рифмаһы, тиди — рәдиф).

Йыйып әйткәндә, И.В.Стеблева Орхон-Йәнәсәй яҙмалары менән «Диуан лөғәт әт-төрк» һәм «Ҡотаҙғу белек» әҫәрҙәрен тематика, форма, тел-стиль йәһәтенән ентекле тикшереп, шундай фекергә килә: «Й.Баласағунлының «Ҡотаҙғу белек» поэмаһы һәм М.Ҡашғарлының «Диуан лөғәт әт-төрк»өндәге шиғри үрнәктәр боронғо төрки поэтик традициялары менән тығыҙ бәйләнештә тороуҙарын күрһәтеүе менән дә беҙҙең өсөн ҡиммәт».

Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡыларын әҙәбиәт ғилеме күҙлегенән сығып тикшереүгә башҡорт ғалимдарынан Салауат Галин үҙ өлөшөн индерҙе. Уның «Төрки әҙәбиәттәрҙең юл башы» исемле хеҙмәтендә («Ағиҙел», 1988, №8) боронғо ташъяҙма тексының башҡорт әҙәбиәтенә, халҡыбыҙҙың рухи культураһына мөнәсәбәте мәсьәләләре тикшерелә, әҫәрҙең тематик, стилистик үҙенсәлектәренә етди байҡау яһала. Унда шулай уҡ ҡомартҡыла телгә алынған ырыу-ҡәбиләләрҙең (мәҫәлән, табын, ҡатай, түңгәүер) башҡорт халҡы составында һаҡланып ҡалыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Төрки ҡағанаты тарихы ҡыҫҡаса яҡтыртып үтелә, Күлтәгингә арналған Оло яҙманың һәм башҡорт эпостарының һүрәтләү сараларындағы, образдар системаһындағы уртаҡ һыҙаттарға фәнни анализ бирелә. Орхон-Йәнәсәй руник яҙмаларын төплө һәм төрлө яҡлап тикшергәндән һуң С.Галин шундай һығымта яһай: «Башҡорт әҙәбиәтенең тамырҙары боронғо тарих төпкөлөнә барып тоташа һәм уның юл башы төрки халыҡтарының боронғо уртаҡ әҙәби ҡомартҡыларында ята. Был йәһәттән Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡыларын өйрәнеү үҙе генә лә башҡорт әҙәбиәте тарихы өсөн бай материал бирә».

Килтерелгән барлыҡ фекерҙәрҙән сығып, Орхон руник яҙмаларындағы, атап әйткәндә, Күлтәгин иҫтәлегенә ижад ителгән Оло һәм Кесе яҙмаларҙағы тарихи-мәҙәни ҡатламды бер аҙ киңерәк планда яҡтыртыу һәм анализлау был хеҙмәттең маҡсаты итеп алынды. Анығыраҡ итеп әйткәндә, ташъяҙма ҡомартҡыларҙы шул осорға хас булған тарихи-этнографик, героик һәм мифологик ҡатламдарға айырып, һәр береһендәге уртаҡ төрки тамырҙарҙы юллау, боронғо төрки халыҡтары һиҙелерлек эҙ ҡалдырған Үҙәк Азия ареалындағы мәҙәни һәм әҙәби традицияларҙы фарсы, бигерәк тә ҡытай рухи культураһы менән бәйләп байҡау күҙ уңында тотолдо.

Өҫтә яралғас Күк-Тәңре, аҫта ер,
Ике арала бер ҡылынды
төркиҙәр.
Тәүҙә ҡаған булды улар өҫтөнән
Минең апам Бумын, һуңынан —
Истеми.
Улар икәү төрки илен ныҡ тотто,
Үҙ дәүләтен ҡурсаланы,
нығытты...

(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», I).

Үҙәк Азияның икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрендә ғүмер кисергән төрки ҡәбиләләре тарихының өр-яңы дәүере, төркиҙәрҙең дәүләтселек һәм хакимлыҡ осоро хаҡында Билге ҡағандың бер туған ҡустыһы, данлыҡлы ғәскәр башлығы Күлтәгин иҫтәлегенә ташҡа ырып яҙылған руник (шына) яҙма ошо һүҙҙәр менән башланып китә. Күренеүенсә, әҫәрҙә донъяның яратылыу ваҡыты шартлы рәүештә төркиҙәрҙең (тимәк, әҙәм балаһының) барлыҡҡа килеү ваҡытына тура килтерелгән. Төрки улдарының был яратылмыш ваҡытының тәүге төрки ҡағандарының хакимлыҡ итеү дәүеренә яҡынлаштырылыуын да шартлы һүрәтләү алымы тип ҡабул итергә кәрәк, сөнки Үҙәк Азияла боронғо төрки ҡәбиләләренең берләшеүенән барлыҡҡа килгән цян, йәки жун иле тураһындағы тәүге мәғлүмәттәр ҡытай сығанаҡтарында сағыштырмаса иртә теркәлгән (беҙҙең эраға тиклемге XIV-XI бб.). Боронғо ҡытай тарихы ғилеменә нигеҙ һалыусы Сыма Цянь (беҙҙең эраға тиклемге 135-67 йй.) яҙыуынса, жундар (ҡайһы бер сығанаҡтарҙа ди йәки дунху) ул дәүерҙәге сәйәси тормошта ярайһы уҡ һиҙелерлек эҙ



10-2001.p65 119 02.11.01, 15:25

ҡалдырған: йә боронғо ҡытай батшалыҡтары менән һуғыштар алып барған, йә үҙ файҙаларын ҡайырып, уларҙың береһе менән хәрби коалицияға ингән.

Әммә шул уҡ Сыма Цянь билдәләп үткән «һуғышыусы батшалыҡтар осоро» Үҙәк Азияла 403-221 йылдарҙа теркәлгән. Был йылдарҙа дөйөм хәл ҡырҡа үҙгәрә, сөнки ҡытайҙарҙың төньяғындағы жундарҙы сюнну (һунну, һун) ҡәбиләләре берләшмәһе алмаштыра. Тарихи аренала һундарҙың пәйҙә булыуы Үҙәк Азияла сәйәси өҫтөнлөккә ынтылған Ҡытай империяһы менән уның төньяҡ-көнбайыш күршеләре араһындағы көсөргәнешле көрәш менән ҡылыҡһырлана. Был йәһәттән шуны ла иҫкә төшөрөп үтеү артыҡ булмаҫ: тап шул дәүерҙә (беҙҙең эраға тиклемге III быуат) император Цинь Ши Хуанди тарафынан һундарҙан һаҡланыу өсөн Бөйөк ҡытай диуары төҙөлә башлай (ҡайһы бер яҙма сығанаҡтар ятусыл күсмә ҡәбиләләрҙең һөжүмдәренән кәртәләнер өсөн таш ҡойма төҙөргә маташыуҙарҙы беҙҙең эраға тиклемге XII-V быуаттарға алып барып ялғай). Нисек кенә булмаһын, был драматизм тулы дәүер шул замандың шиғри йылъяҙмаһы дәрәжәһендә йөрөтөлөргә тейешле «Шицзин» исемле йырҙар һәм мәҙхиәләр китабында ла үҙ сағылышын тапҡан.

Бына, мәҫәлән, әлеге китаптағы «Һундарға ҡаршы походта» мәҙхиәһенең ике строфаһынан өҙөктәр (бында һәм артабан автор тәржемәләре):

I строфанан
...Ғаиләм дә, өйөм дә юҡ...
Бәлә килде —
Илебеҙгә һун ғәскәре
баҫып инде.
Ергә тубыҡ тереп ял да
итеп булмай —
Илебеҙгә һун ғәскәре
баҫып инде.

V строфанан
... Нисек көн дә йыйынмайһың
ил һағына?
Һун ҡыҫымы көсәйә бит
төн яғынан.
(«Шицзин», Кесе мәҙхиәләр,
II, 1, 7).

Сама менән 1500 йыл элек булып үткән дәһшәтле ваҡиғаларҙың барлыҡ көсөргәнешен ап-асыҡ күҙ алдына баҫтыра был юлдар. Бер-береһенә геополитик дошмандар булған күрше дәүләттәр араһындағы киҫкен мөнәсәбәттәрҙең ҡорбаны булған халыҡтар өҫтөнә ябырылған ҡыйралыш та, һуғыш ауырлығын үҙ иңдәрендә күтәргән ябай кешеләрҙең аһ-зарҙары ла, хәүеф тулы кәйефтәре лә бөркөлөп тора уларҙан.

Был юлдар беҙҙең өсөн үҙҙәрендә реаль ваҡиғаларҙы сағылдырыуы менән мөһим, сөнки Үҙәк Азияның төп тарихи-мәҙәни ареалында сәйәси өҫтөнлөк өсөн үлемесле көрәштең аралаш уңыш менән йөҙәр йылдар буйы алып барылыуы — тарихи факт. Һун ҡәбиләләр берләшмәһенең Ҡытай менән яулашыуын һүрәтләгән шиғри юлдар уларҙы теркәп барған хроникаларҙан үҙҙәренең ғәжәп образлы һәм эмоциональ итеп биреләше, уҡыусы күңеленә тәьҫир көсө менән айырыла.

Сағыштырыу өсөн һуңғыраҡ осорҙо — Көнсығыш Төрки ҡағанатын тергеҙеүгә бөтөн ғүмерен биргән Илтерес ҡағандың (Ҡотлоҡтоң, 691 йылда үлә) Ҡытай хакимлығына ҡаршы баш күтәреүен һәм тиңһеҙ көрәшен күрһәткән дәүерҙе үҙенсә тасуирлаған Оло яҙмалағы юлдарға иғтибар итәйек:

Минең атам дошманға
ал бирмәҫкә,
Ҡырҡ ете рәт күтәрелде көрәшкә.
Ул егерме оло яуҙа ҡатнашты,
Ил-көн өсөн йән аямай
һуғышты.
Ярлыҡаған өсөн уны Күк-Тәңре,
Ҡыйратылды дошмандарҙың
ғәскәре.
Иле барҙы илһеҙ, йортһоҙ
ҡалдырҙы,
Ҡағаны барҙы ҡағанынан
яҙҙырҙы,
Дошманынан ныҡлы
солох төҙҙөрҙө.
Башы барҙың башын
түбән эйҙерҙе.
Теҙе барҙың теҙен ергә тейҙерҙе.
(«Күлтәгин иҫтәлегенә
дастан», 15).

Бында әҫәр һүҙымында рефрен булып өс тапҡыр ҡабатланыусы

һуңғы ике юл деталь булараҡ ҡыҙыҡлы. Әгәр ҡытай әҙәби ҡомартҡыһында ергә тубыҡ терәү өҙлөкһөҙ һуғыш хәрәкәттәренән миктәгән яугирҙың ял итеүгә булған изге теләген кәүҙәләндереүсе хыял рәүешендә килтерелһә, Орхон руник яҙмаһында ул, күренеүенсә, дошманды буйһондороу символы булараҡ ҡулланыла.

Шулай уҡ «Шицзин»дәге «... Ғаиләм дә, өйөм дә юҡ... Бәлә килде» тигән юлдар менән төрки яҙмаһындағы «Иле барҙы илһеҙ, йортһоҙ ҡалдырҙы» тигән һүҙҙәрҙең генетик оҡшашлығына иғтибар итмәү мөмкин түгел. Уларҙа төрлө быуаттарҙағы берҙәй хәл-ваҡиға тураһында һүҙ бара. Айырма тик шунда: тәүгеһендә аяуһыҙ һуғыштар арҡаһында ил-йортонан, яҡындарынан ҡолаҡ ҡаҡҡан заттың шәхси фажиғәһе һүрәтләнә, һуңғыһында иһә дошманын теҙ сүктергән Илтерес ҡағандың эпик кимәлдәге тантанаһы яңғырай.

Ә бына «Воевода Нань Чжундың һундарға ҡаршы походы хаҡында» тигән мәҙхиә төркиҙәрҙең ҡытай армияһынан еңелеүе тураһында һөйләй:

III строфанан
... Бик дәһшәтле ине Нань Чжун,
ҡурҡыныс ине Нань Чжун,
Һәм бына дошман ҡыуылды, һәм
ҡыуылды илдән һун.

V строфанан
...Бик дәһшәтле ине Нань Чжун,
ҡурҡыныс ине Нань Чжун,
Һәм мәғриб баҫҡынсыларын
яралай ҡурҡыу үә шом.

VI строфанан
... Бик дәһшәтле ине Нань Чжун,
ҡурҡыныс ине Нань Чжун,
Һәм илдең төньяҡ сигендә
йыуашландырылды һун.
(«Шицзин», Кесе мәҙхиәләр,
II, I, 8).

«Бер йыл бүҙәнә, бер йыл тартай һимерә» тигәндәй, донъя борондан алмаш килгән, сөнки «Воевода Инь Цзифуның һундарға походы» исемле мәҙхиәлә, киреһенсә, төрки ғәскәренең бер аҙға өҫтөнлөк алыуы тасуирлана:

I строфанан
Ҡоторонҡо ташҡын булып килә
һун ғәскәрҙәре,
Уларға ҡаршы ашыға илдең
батыр ирҙәре.

IV строфанан
Ләкин һундар, уйлап тормай,
көстәренә ышанды —
Ҡапыл боролоп Цзяоны, шунан
Ху илен алды;
Хао ерен буйһондорҙо, Шофан
сигенә етте,
Шунан Цзинхэ йылғаһының
төньяҡ ярына сыҡты.
(«Шицзин», Кесе мәҙхиәләр,
II, III,3).

Шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып китергә кәрәк: боронғо ҡытай шиғриәтенән килтерелгән өҙөктәр ҙә, Орхон руник яҙмаһынан алынған миҫал да ул замандарҙағы бигүк ябай булмаған төрки-табғас (ҡытай) мөнәсәбәттәренең поэтиклаштырылған йылъяҙмаһы, үҙенсәлекле иллюстратив материал хеҙмәтен үтәй. Беҙҙең эраның 732 йылында Күлтәгин иҫтәлегенә ижад ителгән был тарихи-героик эпостағы ваҡиғаларҙың күбеһенең башлыса ҡытай сығанаҡтарындағы тарихи мәғлүмәттәр менән нығытылыуы был әҫәрҙең реалистик йүнәлешен билдәләй һәм уны төрки халыҡтарының иң тәүге эпик яҙма ҡомартҡыһы булараҡ ниндәйҙер дәрәжәлә шул күҙлектән сығып тикшерергә мөмкинлек бирә.

Орхон яҙма ҡомартҡыларына башҡорт халҡының, башҡорт әҙәбиәтенең мөнәсәбәте мәсьәләһенә килгәндә, беренсенән, һорауҙың был рәүешле ҡуйылыуы бөтөн донъя төркиәт ғилемендә күптән инде бәхәс уятмауын билдәләп үткәйнек инде, сөнки, ҡабатлап әйткәндә, улар барлыҡ төрки халыҡтарҙың уртаҡ әҙәби мираҫы. Икенсенән, башҡорт ырыу-ҡәбиләләренән табын, түңгәүер һәм ҡатайҙарҙың боронғо тарихы Төрки ҡағанатына барып тоташа. Мәҫәлән, С.Галин үҙенең «Төрки әҙәбиәттәрҙең юл башы» тигән хеҙмәтендә («Ағиҙел», 1988, 8-се һан) Р.Ғ.Кузеев фекерен килтерә: «Орхон-Йәнәсәй ҡомартҡыларында,

атап әйткәндә, Көлтәгингә арнал-ған Ҙур яҙмала, татабы исеме менән йөрөтөлгән халыҡ хәҙерге табындарҙың боронғо замандарҙа татабы формаһында әйтелеүе ихтимал. 15 быуатҡа яҡын ваҡыт аралығында татабы этнонимының төрлө телдәрҙә һөйләшеүсе ырыу-ҡәбиләләр солғанышында табын формаһына үҙгәреп китеүе бик мөмкин».

Ысынлап та, башҡорт шәжәрәләренең береһендә табын ҡәбиләһенең боронғо ата-бабаһы итеп Төмән бей, йәғни, Бумын ҡаған күрһәтелә. Ә тарихи сығанаҡтар билдәләүенсә, Бумын ҡаған 551 йылда ҡапыл жуань-жуан (авар) ханлығына баҫып инә һәм уны тар-мар итеп, Илхан тигән титулды ҡабул ҡылып, Беренсе Төрки ҡағанатына нигеҙ һала. Асылда, төркиҙәрҙең яҙма тарихы әлеге шанлы ваҡиғанан башланып китә.

Был тарихи ваҡиға хаҡында Л.Н.Гумилев былай тип яҙа: «Арал диңгеҙенең төньяҡ ярҙарында төркөттәр (төркиҙәр) хуни (хионит), вар, огур ҡәбиләләренең ҡаршылығына осрай. Был ҡәбиләләр фәҡәт 558 йылда тар-мар ителә һәм төркиҙәр Волгаға килеп сыға».

Ошо тарихи контекста ҡарағанда татабыларҙың (табындарҙың) Бумын ҡағанды һәм уның улы Истеми ҡағанды ерләшергә килеүҙәре аңлашыла:

... Мәрхүмдәрҙе ерләшергә
килделәр:
Көн тыуыштан — Бөклө тигән
ил-йорттан,
Йәнә табғас, тибет, рум, өс
ҡурыҡан,
Йәнә ҡырғыҙ, татабы
һәм аварҙар,
Килде ҡытай, килде утыҙ
татарҙар...
(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 14).

Ләкин артабанғы текста татабыларҙың Илтерес ҡағандың дошмандары рәтендә һанап кителеүе генә бер аҙ аңлашылып етмәй:

... Ҡырғыҙ, ҡытай, ҡурыҡан
һәм татабы,
Утыҙ татар — дошмандың
юҡ хисабы!..
(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 14).

Күрәһең, табындар йә Илтерестең Ҡытай империяһына ҡаршы ойоштороған көрәшен хупламайынса уға тейешле ярҙам күрһәтмәгән, йә тәүҙәрәк Ҡытай армияһы яғында үҙҙәренең ҡан-ҡәрҙәштәренә ҡаршы һуғышҡан. Әммә аҙаҡтан татабылар Илтерес тергеҙгән, уның уландары Белге ҡаған менән хәрби юлбашсы Күлтәгин нығытҡан Төрки ҡағанатына ылыҡҡандыр, тип уйларға дастандың аҙағы нигеҙ бирә:

...Һыҡтаусылар килде ҡытай иленән,
Йәнә күрше татабылар еренән,
Уҙар сәңүн тигән данлы
ир менән...
(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 52).

Ҡатайҙарға килгәндә инде, уларҙың да этник тарихы Төрки ҡағанатына барып тоташа. Тик Орхон ташъяҙмаһында уларҙың атамаһы «ҡытаң» формаһында ырылған. Төп сығыштары буйынса монголдарҙың саньби ҡәбиләһенә ҡараған ҡара ҡытандар (ҡара ҡатайҙар) тарихҡа III-IV быуаттарҙа уҡ билдәле була.

Шуны айырыуса һыҙыҡ өҫтөнә алып китергә кәрәк: беҙгә хәҙерге көндә билдәле булған Ҡытай дәүләте һәм уның халҡы текста «табғас» атамаһы аҫтында бирелгән. Ә Орхон ҡомартҡыһындағы ҡытай этнонимын бында һүҙ алып барылған ҡара-ҡытайҙар, йәғни, башҡорт халҡы составына һуңғараҡ, табындар менән бер осорҙараҡ килеп ингән ҡатайҙарҙың ата-бабалары тип аңларға кәрәк. Дастандың тексы был тәңгәлдә ике төрлө фекер йөрөтөргә урын ҡалдырмай:

... Ҡытай менән татабыға —
ал яҡҡа,
Табғастарға ҡаршы уңға —
көньяҡҡа
Ун ике рәт ҙур яу менән
ҡуҙғалдым,
Һәр берендә оло шөһрәт
ҡаҙандым.
(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 28).

Килтерелгән текст табғас менән ҡытайҙың ике айырым ил, айырым халыҡ икәнен раҫлау менән бер рәттән, ҡатайҙарҙың да Төрки ҡағанаты менән дошманлашып, мәңге



10-2001.p65 122 02.11.01, 15:25

ызғышып-талашып йәшәүҙәре хаҡында һөйләй. Үҙ-ара талаш-тартыш Беренсе Төрки ҡағанаты тарҡалыуҙың төп сәбәптәренең береһе булараҡ тасуирлана дастанда:

Ҡағанаттың бейҙәре һәм
бар халыҡ
Һаҡламаған өсөн ханға тоғролоҡ;
Сихырланып мәкер тулы теленә,
Төшкән өсөн табғастарҙың
һүҙенә;
Ағай-эне низағлашып, боларып,
Бейгә ҡаршы халыҡ янъял
сығарып,
Дошманлашып бөткән
өсөн үҙ-ара,
Ҡағанатта ҡаҡшай барҙы идара.
Был — бар илде бөлгөнлөккә
төшөрҙө,
Ҡағандарҙы һәләкәткә килтерҙе.

(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 6).

Поэманың 28-се бүлегенән килтерелгән юлдарҙан күренеүенсә, Белге ҡаған һәм унының иң яҡын, тоғро көрәштәше Күлтәгин алып барған хәрби походтар тырым-тырағай йәшәгән ырыу-ҡәбиләләрҙе берләштереү менән тамамлана. Һөҙөмтәлә Көнсығыш Төрки ҡағанаты тергеҙелә һәм ҡеүәтле дәүләт барлыҡҡа килә. Был дәүләт составында ҡатай ырыуы вәкилдәре лә тамам төркиләшеп китә.

Ҡатай ырыуы башҡорттары теленең фонетик яҡтан Орхон яҙмалары теленә нык оҡшашлығы ла фәндә яҡшы билдәле. Быға иллен-се йылдарҙа уҡ танылған тел ғалимы Ж.Кейекбаев иғтибар итә: «Диалект теленә ҡарағанда, ҡатайҙар Орхон һәм Селенга буйҙарынан сыҡҡан халыҡ булырға тейеш, сөнки ҡатай башҡорттары диалектында V-VIII быуаттарҙағы Йәнәсәй-Орхон ҡомартҡылары теленең үҙенсәлектәре, атап әйткәндә, ЛТ, МТ, НТ, ҢТ, МК, ҢҠ кеүек диссимилятив берләшмәләр һаҡланып ҡалған. Хәҙер улар төрки телдәренең береһендә лә осрамай».

Башҡорт халҡы составына сама менән VIII быуатта килеп ҡушылған түңгәүерҙәрҙең, уларҙың бер төркөмө булған йылайырҙарҙың да монгол сығышлы булыуы билдәле. Уларҙың да Төрки ҡағанаты эсендә төркиләшеү һәм аҡрынлап көнбайышҡа күсенеп, Уралда төпләнеү тарихы ҡатайҙарҙыҡына оҡшаш. Өҫтәп шуны әйтеп китергә була: Орхон руник яҙмаһында улар ҙа телгә алынып китә. Бына, Оло яҙманан бер өҙөк:

... Дошман сафын таркатҡандың
һуңында,
Төңгәтәгин зыяраты янында,
Төңрө тигән ырыуҙан ун яугирҙы
Беҙҙекеләр ҡамап алып,
үлтерҙе...

(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 47).

Бында һүҙ Икенсе Төрки ҡағанатын тергеҙеү, унының сиктәрен нығытыу осоронда туғыҙ уғыҙ ҡәбиләләре союзы менән көсөргәнешле һуғыш тасуирлана. Тексттың бынан алдағы юлдарында төрки ғәскәрҙәренең уғыҙҙарҙан саҡ еңелмәй ҡалыуы бәйән ителә:

Был һуғышта, быуындары
ҡалтырап,
Ҡыйратылған алғасҡыһын
ҡалдырып,
Төңөлөргә әҙер ине төркиҙәр,
Еңелергә әҙер ине төркиҙәр.
Тап шул саҡта
күтәрелеп Күлтәгин,
Батырҙарса тиҙ хәл итте бөтәһен:
Дошмандарҙың сафын
ҡыуып таратты,
Төркиҙәрҙә еңеүгә сәм уятты.

(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 47).

Миҫал өсөн килтерелгән өҙөктәрҙә беҙҙең өсөн шуныһы ҡыҙыҡлы: түңгәүерҙәр (ҡомартҡыла улар «төңрө» тигән формала бирелгән) боронғо ҡомартҡыла һүҙ барған дәүерҙә уғыҙ ырыу-ҡәбиләләре менән тығыҙ бәйләнештә булған. Белге ҡаған менән Күлтәгин ғәскәренә ҡаршы ауыһыҙ ҡаршылыҡ күрһәткән уғыҙҙар сафында түңгәүерҙәрҙең дә булыуы беҙҙең фекерҙе ҡеүәтләүсе мөһим бер дәлил.

Ғөмүмән, Күлтәгин иҫтәлегенә ижад ителгән әҙәби ҡомартҡыларҙың икеһе лә үҙҙәрендә бай этнографик материалдар һаҡлауы менән ҡиммәт. Уларҙа беҙ Беренсе һәм Икенсе Төрки ҡағанаттары дәүерендә тереклек иткән ҙур ырыу үә ҡәбиләләрҙең атамаларын осратабыҙ: уғыҙҙар, табғастар, таттар, ҡурыҡандар, ҡырғыҙҙар, табындар, аварҙар, ҡатайҙар, татарҙар,



10-2001.p65 123 02.11.01, 15:25

төләстәр, тардуштар, төргәштәр, ун уҡтар, аздар, кәңрәстәр, ҡарлуҡтар, изгелдәр, әдиздәр, түңгәүерҙәр.

Оло һәм Кесе яҙмаларҙағы был тарихи-этнографик мәғлүмәттәр беҙгә йәнә шуныһы менән мөһим: ауыҙ-тел ижадынан айырмалы рәүештә уларға яҙма әҙәбиәт өлгөләре һәм ҡиммәтле сығанаҡ булараҡ шикләнмәйенсә таянырға мөмкин, сөнки беҙ был ҡомартҡыларҙың авторҙарын беләбеҙ. Ошо уңай менән билдәле төркиәт белгесе И.В.Стеблева былай тип яҙҙы: «Был текстар инде яҙма әҙәбиәт ҡарамағында тора, ни өсөн тигәндә, беҙгә уларҙың авторҙары билдәле. Күлтәгин хөрмәтенә Оло һәм Кесе яҙмаларҙы, шулай уҡ Белге ҡаған хөрмәтенә яҙманы хакимлыҡ итеүселәрҙең нәҫелдәше Юлыҡтәгин ижад иткән, ә Тонйуҡуҡ хөрмәтенә яҙма фараз буйынса унын үҙе тарафынан яҙылған».

Әйтелгәндәрҙән шундай һығымта килеп сыға: әгәр беҙ шартлы рәүештә Орхон-Йәнәсәй руник яҙмалары тип йөрөтөлгән рухи ҡомартҡыларҙы барлыҡ төрки халыҡтарының уртаҡ әҙәби мирасы тип һанайбыҙ икән, иң мөһиме, беҙ уларҙың авторҙарын беләбеҙ икән, тимәк, мәктәптәрҙә әҙәбиәт уҡытыуҙы яҙма әҙәбиәттәребеҙҙең шишмә башы булараҡ тап шуларҙан башлап китергә тейеш булабыҙ. Һәр хәлдә, был күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә.

Орхон руник яҙмаларындағы этнографик ҡатламға артабанғы сәйәхәтте «төрки» этнонимынан башлайыҡ. Ҙур энциклопедик һүҙлек уларҙы былай тип нарыҡлай: «Орхон төркиҙәре — V-VIII быуаттарҙа башында ашина ҡәбиләһе торған Үҙәк Азия төрки телле ҡәбиләләре берләшмәһе. Төрки ҡағанатын төҙөүҙә ҡатнашалар. Уйғырҙар тарафынан тар-мар ителә».

VI быуатта ҡытай тарихсылары тарафынан яҙып алынған риүәйәт буйынса, төркиҙәрҙең «ҙур һаҙлыҡ ситендә йәшәгән» ата-бабалары күрше ҡәбилә һуғышсылары тарафынан ҡырып бөтөрөлә. Ҡулдары менән аяҡтары киҫелгән ун йәшлек малай ғына иҫән ҡала. Уны инә бүре тәрбиәләп үҫтерә һәм аҙаҡтан егеттең ҡатынына әүерелә. Дошмандар һуңғы сиратта малайҙы эҙләп табып, үлтергәс, инә бүре уларҙан Турфан (көнсығыш Тянь-Шань) тауҙарына ҡаса һәм мәмерйәлә ун ир бала тыуҙыра. Бүренән тыуған егеттәр аҙаҡтан Турфан ҡыҙҙарына өйләнә. Шул никахтарҙың береһенән донъяға килгән Ашина өр-яңы ырыуҙың башлығы булып, уға үҙ исемен бирә. Һуңынан был ырыуҙың башлыҡтары тоҡомдаштарын Алтайға алып киләләр һәм урындағы ҡәбиләләрҙе берләштереп, улар өҫтөнән хакимлыҡ урынлаштырып, төрки этнонимын ҡабул итәләр.

Боронғо төрки халыҡтарының мифологик ҡараштарын, диндең иң боронғо формаһы булараҡ тотемистик инаныуҙарын сағылдырған был риүәйәт төркиҙәрҙең донъяға яралған урынын тоҫмаллата: көнсығыш Тянь-Шань. Был, асылда, ҡытай тарихи хроникаларындағы мәғлүмәттәр менән тап килә.

Ул хроникаларға ярашлы рәүештә, һун ҡәбиләләре берләшмәһе III быуат аҙағында — IV быуат башында Нань-Шань тауҙарының төньяғында пәйҙә булып, IV быуат аҙағында унан ҡыҫырыҡлап сығарыла. 460 йылда уларға монгол телле жуань-жуандар (аварҙар) һөжүм итә һәм уларҙы ҡыйратып, Алтайға күсенергә мәжбүр итә.

Аварҙар тарафынан Алтайға ҡыуылғанға тиклем үк ашина ҡәбиләләр союзы үҙ составына яңы этник төркөмдәрҙе ҡабул итә. Ә тарихи сығанаҡтар Көнсығыш Төркөстанда ул саҡта нигеҙҙә иран (сөғди) һәм тохар (һинд-европалы) халыҡтары йәшәүен билдәләй. Ашиналарҙың теленә һәм мәҙәни традицияларына тап улар ҙур йоғонто яһай, артабанғы дәүләтселек ҡоролошона ыңғай әҙергес бирә.

Татар ғалимы Нурихан Фәттәх үҙенең «Язык богов и фараонов» тигән китабында, мәҫәлән, был тәңгәлдә Д.Е.Еремеевтан һылтанмалар килтерә: «Ихтимал, «төрк» этнонимы үҙе үк иран сығышлылыр». Шул уҡ Д.Е.Еремеев раҫлауынса, Орхон-Йәнәсәй ташъяҙмаларын-



10-2001.p65 124 02.11.01, 15:25

дағы төрки һүҙҙәренең байтағы иран һәм тохар сығышлы. Мәҫәлән, беш, түмән, кён, өгүз, бәг, бөре, тон (дон) һ.б. Пенти Аалто (фин) менән В.Л.Гукасьян былдарҙан тыш йәнә тархан, джабғу (ябғу), шад, эр, ҡатун, ҡаған, тигин, хан кеүек һүҙҙәрҙе өҫтәйҙәр.

Нисек кенә булмаһын, ашина төркиҙәре үҙ составына уғыҙ ҡәбиләләр союзын ҡабул итеп (ҡытай хроникаларында улар теле (тәгәрәк — «арбалылар») исеме аҫтында теркәлгән), улар иҫәбенә ҡеүәтләнеп, үҙҙәре тимер менән яһаҡ түләп торған жуань-жуандарға ҡаршы баш күтәрәләр. Аварҙарҙың Бумындан еңелгән һуңғы ҡағаны Анахуан үҙ-үҙен үлтерә һәм төркиҙәрҙең тарихтағы тәүге дәүләтселек осоро башлана.

Шулай ҙа кемдәр һуң ул ҡатмарлы социаль-сәйәси шарттарҙа дәүләт төҙөүгә ирешкән төркиҙәр? «Төрк» этнонимы низә аңлата, сөнки ул исемдәге этнос ғөмүмән донъяла юҡ бит? Төркиәт менән шөғөлләнеүсе бик күп ғалимдар эҙләгән был һорауҙарға яуапты. Бына, атаҡлы ориенталист В.В.Бартольд был хаҡта ни яҙып ҡалдырған: «Төрк» һүҙе... бер күсмә халыҡтың атамаһы булараҡ, беренсе тапҡыр беҙҙең эраның VI быуатында пәйҙә була. Шул уҡ быуатта төркиҙәр Монголиянан һәм Ҡытайҙың төньяҡ сигенән алып Ҡара диңгеҙгә тиклем һуҙылған империяға нигеҙ һалалар».

Был һүҙҙәр ҙә шул уҡ авторҙыҡы: «Ғуз (ғуздар) — уғыҙҙарҙың төрки халҡының ғәрәпсә атамаһы. Беҙҙең эраның VI быуатында барлыҡ ҡәбиләләрҙе Ҡытайҙан алып Ҡара диңгеҙгәсә бер күсмә империяға берләштергән ҙур халыҡ шулай аталған булһа кәрәк».

В.В.Бартольдтың түбәндәге һығымтаһы иһә беҙ тикшергән Орхон руник ҡомартҡыларына туранан-тура ҡағыла: «Яҙмаларҙағы «төрк» һүҙе... этнографик булыуҙан бигерәк, сәйәси мәғәнәгә эйә: «минең төркиҙәрем, минең халҡым» һүҙбәйләнештәре шуға ишаралай».

Һәм һуңғыһы: «Ихтимал, уғыҙҙар менән төркмәндәр төркиләштерелгән иранлы күсмәндәрҙән килеп сыҡҡандыр, уларҙың характерлы баш формаһы шуның менән аңлатыла». (В.В.Бартольд)

Шулай итеп, әйтелгәндәрҙе дөйөмләштереп, беҙ ошондай һығымтаға килергә мәжбүрбеҙ:

1. «Төрк» этнонимы, ысынлап та, этнографик төшөнсә түгел, ә сәйәси категорияға ҡараусы термин.

2. Үҙәге, төшө ашина ҡәбиләһенән торған Күк Төрк дәүләтенең нигеҙен ҡеүәтле уғыҙ ҡәбиләләре союзы тәшкил иткән. Академик В.В.Бартольдтың: «Хан һәм уның тарафдарҙары үҙҙәре уғыҙ халҡынан сығыуҙары бик мөмкин», — тигәне лә беҙҙең фекерҙе ҡеүәтләй.

Тәүге һығымтаның асылына килһәк, империялар тарихында ундай күренештәр әҙ түгел. Мәҫәлән, күп этнослы Рим, Византия (Рум), Алтын Урҙа империялары һ.б. Уларҙың береһендә лә дәүләткә исем биргән ырыу-ҡәбилә булмаған. Әммә тарихта этносҡа йә булмаһа тотош халыҡҡа исем биргән шәхестәр билдәле. Мәҫәлән, Үзбәк хан боронғо һарттарҙың үҙатамаһына әүерелгән. Башҡорт этнонимының килеп сығышын Башҡорт ханға бәйләп аңлатыусы фараз да бар фәндә. Шул уҡ традицияны беҙ ашина ҡәбиләһе миҫалында ла асыҡ күрәбеҙ.

Ошоларҙан сығып фекер йөрөтөп ҡарағанда, «төрки» этнонимының легендар Ашина ейәндәренең береһенең исеме булыуы ихтимал, тигән уй ярала. Алтайға күсеп, урындағы ҡәбиләләр иҫәбенә көсәйгән был этник берләшмәнең үҙен етәкләгән кешенең исеме аҫтында билдәләлек алып китеүе бик мөмкин.

Һәр хәлдә, Орхон руник яҙмаларында теркәлгән «төрки халҡы», «төрки иле» тигән төшөнсәләрҙе беҙ «совет халҡы», «совет иле» йәиһә «америка халҡы», «америка дәүләте» тип аңлағандай ҡабул итергә тейеш булабыҙ. Ә боронғо төрки ташъяҙмаһына ырып яҙылған үлемесле һәм фажиғәле һуғыш хәрәкәттәрен берберeһенә ҡан-ҡәрҙәш булған ырыуҡәбиләләр араһындағы граждандар һуғышы итеп күҙ алдына баҫтырырға кәрәктер. Быға иң төплө

дәлилде беҙ эпостың үҙенән табабыҙ:

... Туғыҙ уғыҙ халыҡтары
hис дәүер
Түгел ине беҙҙең өсөн ят бауыр.
Өҫтә Тәңре, ә аҫта ер боларҙы —
Беҙгә дошман итте
хатта уларҙы...

(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 44).

Ҡағанаттың тарихҡа билдәле булған өҫтәлмә «Күк Төрк» атамаhына килгәндә, уға ла Күлтәгингә арналған Оло hәм Кесе яҙмаларҙа аңлатма табып була кеүек. Кесе яҙма ошолай башланып китә:

Мин Тәңрегә оҡшап ергә
тыуғанмын,
Күк-Тәңренән булмыш
Белге ҡағанмын...

(«Күлтәгингә бағышланған ҡомартҡы», 1).

Оло яҙма ла шуны уҡ киңәйтеңкерәп раҫлауҙан башлана:

Өҫтә яралғас Күк-Тәңре, аҫта ер,
Ике арала бар ҡылынды
төркиҙәр...

(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 1).

Поэмалағы күк менән Тәңре төшөнсәләре араhындағы берҙәйлекте аңғармау мөмкин түгел бында. Күк — тимәк, Тәңре, Тәңре — тимәк, күк. Эпостың авторы Юлыҡтәгин Белге ҡағандың да, төркиҙәрҙең дә донъяға бар ҡылыныуын күк, йәғни, Тәңре менән бәйләй.

Артабанғы текста Тәңре төркиҙәрҙе ҡурсалаусы, ҡот hәм бәхет биреүсе илаhи зат булараҡ тасуирлана:

Ләкин өҫтә төркиҙәрҙең Тәңреhе,
Ә түбәндә изге ер hәм изге hыу:
«Төрки халҡы тере ҡалhын, —
тинеләр, —
Элеккеләй халыҡ булhын»,
— тинеләр...

(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 11)

...Атама көс биргән өсөн
Күк-Тәңре,
Бүре кеүек алғыр булды ғәскәре...

(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 12)

...Ярлыҡаған өсөн уны
Күк-Тәңре,
Ҡыйратылды дошмандарҙың
ғәскәре...

(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 15).

Күренеүенсә, Орхон руник яҙмаларындағы текст «күк» төшөнсәhенең төҫтө белдереүҙән бигерәк, төрки халыҡтарҙың сығышына бәйле «күк йөҙө», «асман» («небо») тигән билдәләмәгә баҫым яhай. Ер йөҙөндә күк раса кешеләренең булмауы ла беҙҙең был фекерҙе ҡеүәтләй. Шулай булғас, Төрки ҡағанатының икенсе атамаhына әүерелеп, тарих фәнендә нығынған «Күк Төрк» hүҙбәйләнешен быға тиклем тәржемә ителгәнсә «Голубые тюрки» түгел, ә «Небесные тюрки» тип йөрөтөү хәҡиҡәткә күберәк тап килер ине.

Әлбиттә, «Күк Төрк» атамаhындағы «күк» термины төҫ төшөнсәhе булараҡ ғәжәйеп ҡеҙрәт менән (бәлки, төптән уйланылып) Төрки ҡағанатының үҙәген тәшкил иткән ашина ҡәбиләhенең тотемы (аджибве телендә ототем — уның ырыуы, нәҫеле) бүре төҫөнә тап килгән (мәҫәлән: «Ҡапҡан hалдым Ҡараташҡа, күк бүрене алам, тип», «Ялан ғына ерҙең бүреhе, күк hыртландай булыр күбеhе»). Нисек кенә булмаhын, был факт боронғо Төрки ҡағанатында дәүләт атрибутикаhы мәсьәләләренә бик етди ҡараш булыуы hәм шул замандарҙа уҡ ярайhы үҫешкән ижтимағи-сәйәси традициялар барлыҡҡа килгәнлеге хаҡында hөйләй.

Орхон руналарында, атап әйткәндә, Оло яҙмала hүҙ барған дәүерҙә Икенсе Көнсығыш Төрки ҡағанатының төп дошмандары ҡайhы юҫыҡта йәшәгәне асыҡ итеп ҡат-ҡат әйтеп кителә:

Әгәр ундан атайыма туҡтаyhыҙ
Дошмансылыҡ ҡылhа табғас
аяуhыҙ,
Һул тарафтан hөжүм итте
бик яман
Туғыҙ уғыҙ юлбашсыhы
Баҙ ҡаған...

(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 14).

Уғыҙҙарға ҡаршы hулға —
төньяҡҡа,
Ҡытай менән татабыға —
ал яҡҡа,
Табғастарға ҡаршы уңға —
көньяҡҡа

Ун ике рәт ҙур яу менән
ҡуҙғалдым...
(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 28).

Төрки ҡағандарының пайтәхете (ставкаһы) Үтекән тигән хозур ерҙә урынлашыуы хаҡында эпостың Кесе яҙмаһында бер нисә ҡат әйтеп кителә:

... Ә Үтекән тирә-йүндә бер ине,
Нәҡ ил тотоп йәшәй торған
ер ине...
(«Күлтәгингә бағышланған ҡомартҡы», 8).

Ә Үтекән хәҙерге төньяҡ Монголия территорияһындағы урмандар менән ҡапланған Хангай исемле тауҙар теҙмәһендә урынлашҡан булған. Унан алға — көнсығышҡа ҡарағанда ҡатайҙар менән табындарҙың көн иткән ерҙәре Орхон, Селенга, Керулен йылғаларының үҙәндәре, Улан-Батор ҡалаһы ултырған ерҙәр булып сыға. Был атаҡлы Ж.Кейекбаев фаразына өҫтәлмә дәлил, һүҙенә ҡеүәт. Әйткәндәй, ҡатайҙар менән табындар үҙҙәренең боронғо илдәрендәге кеүек, бөгөнгө көндә лә бер-берәһенә арҡа терәп, күрше генә йәшәйҙәр.

Табғастар, әлбиттә, көньяҡ тарафта, ә туғыҙ уғыҙ ҡәбиләләр союзына һыйынып йәшәгән ҡәүемдәрҙән уғыҙҙар, әдиздәр, ҡурыҡандар, ҡырғыҙҙар көньяҡта — Саян тауҙары үҙәндәрендә, Йәнәсәй буйҙарында, Байкал күленең төньяҡ-көнбайыш ярҙарында маҡәм тотҡан. Ҡомартҡыла телгә алынған ҡәбиләләрҙән таттар, төргәштәр, ҡарлуҡтар, ун уҡтар, аздар, изгелдәр ҡағанаттың көнбайышында тереклек иткән булып сыға.

Күлтәгингә бағышланған Оло яҙмала «аз» этнонимы аҫтындағы ҡәүем хаҡында бер нисә мәртәбә телгә алына:

...Аз өлкәһе ғәскәренең тотоғон
Әсирлеккә алды йәнә Күлтәгин...
(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 38).

...Ә унан һуң аздар
менән ыҙғыштыҡ,
Улар менән Ҡара күлдә
һуғыштыҡ...
(«Күлтәгин иҫтәлегенә
дастан», 42).

...Ир Күлтәгин аз
ғәскәрен бөкшөрҙө,
Илтәбәрен уның ҡулға төшөрҙө.
Аз халҡына килде тулы һәләкәт,
Өҫтәренән үтте, гүйә, ғәрәсәт...
(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 43).

Бынан алдараҡ Төрки ҡағанатының регуляр армияһы тарафынан хионит, авар һәм уйғыр ҡәбиләләр берләшмәһе ғәскәренең Арал менән Урал араһында (руник яҙмала аныҡланып киткәнсә, Ҡара күл эргәһендә) ҡыйратылыуы һәм һуңғыларының Оло Иҙел (Волга) бассейнына сигенеүе тураһында әйтеп үтелгәйне. Был ваҡиға тарихта ла теркәлгән. Мәҫәлән, ошо хаҡта И.Эрдели былай тип яҙа: «Күп кенә венгр тарихсыларының фекеренсә, секейҙәр (секелдәр) төркиҙәр ҡыҫымы аҫтында VI быуатта Дунай үҙәненә бәреп ингән аварҙарҙың тоҡомдары, 894-895 йылдарҙа венгрҙарға килеп ҡушылалар. Һуңғыраҡ осорҙа секейҙәр Трансильванияға күсеп ултыралар».

Эпоста секейҙәр (изгелдәр) хаҡында ла әйтеп үтелә:

...Апам ҡаған төҙөгән
ҙур дәүләттә
Көнсөлөк һәм ыҙғыш
арҡас үләттәй,
Беҙ изгелдәр менән дошман
булыштыҡ,
Улар менән аяуһыҙ ныҡ
һуғыштыҡ.
(«Күлтәгин иҫтәлегенә дастан», 43).

Ибн-Рустаның (Х быуат) яҙып ҡалдырыуы буйынса, Оло Иҙел болғарҙары өс өлөшкә бүленгән: Болғар, Берсула, Эсегел. Ә Д.А.Хвольсондың билдәләп үтеүенә ҡарағанда, болғарҙарҙың эсегел атамаһы менән Трансильваниялағы секелдәр икеһе бер үк. «Эсегел» терминының этимологияһына килгәндә, ул «аз иле, аз халҡы» тигәнде аңлата.

Билдәле булыуынса, руник яҙмалар Үҙәк Азияла, Урта Азияла ғына түгел, көньяҡ-көнсығыш Европала ла киң таралған булған. А.М.Щербак хатта ул яҙмаларҙың конкрет



10-2001.p65 127 02.11.01, 15:25

ареалдарын да атап күрһәтә: төньякта — Дон үре, көнсығышта — Волга бөгөлө, көнбайышта — Дон йылғаһы, көньякта — Кавказ тауҙары.

Руник яҙмалар буйынса күп йыллыҡ тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә ҡарасәй-балҡар ғалимы С.Я.Байчоров шундай фекергә килә: «Хронистарға авар булараҡ билдәле булған болғарҙар Трансильванияла «Төньяҡ Кавказ» тибындағы руник яҙманы тараҡкандар».

Әлбиттә, бында болғар тигәндән өҫтәрәк телгә алынған секелдәрҙе (Оло яҙмала улар «изгел» тип бирелгән) күҙ уңында тоторға кәрәк.

Әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, Оло яҙмалағы изгелдәр аз өлкәһе халыҡтары менән союзда торған аварҙарҙың (жуань-жуандарҙың) бер ярсығы булған ҡәүем икәне шөбһәһеҙ. Ә изгелдәр менән аздар, үрҙә билдәләп үтеүебеҙсә, болғарҙарҙың бер тармағы булараҡ, улар менән тығыҙ хәрби-сәйәси бәйләнештә торған.

Тарихта һәм уның поэтиклаштырылған йылъяҙмаһы булған Орхон руник ҡомартҡыһында изгелдәрҙең дә, аздарҙың да тар-мар ителеүе, һәләк булып, ер йөҙөнән юйылыуы хаҡында бәйән ителә. Әммә был халыҡтар тамам юҡҡа сыҡмай, көнбайышҡа ыҡлап, Дунай буйҙарында, Дон, Кавказ тирәләрендә яңы Ватан таба. Уларҙың фажиғәле тарихтары хаҡында һөйләгән күп һанлы руник яҙмалар ғына тороп ҡала көньяҡ-көнсығыш Европала. Бына шуларҙың береһе — ул Төньяҡ Кавказдағы Архыз ташындағы яҙыу:

«/э/р/ен/ /а/з /а/й/ырылты/м»
(«ир аздарҙан айырылдым»)

Тағы шуныһы: Күк Төрк дәүләтенең регуляр армияһы менән тиңһеҙ көрәштә ҡыйралған, ярсыҡ-ярсыҡ булып көнбайышҡа һибелгән аздар, ҡасандыр үҙҙәре йәшәгән тотош ҡитғаға исем биреп, тарихи аренанан юғала. Һәр хәлдә, «азия» һүҙенең этимологияһы нигеҙендә «аз (аздар) иле» тигән мәғәнә ята булһа кәрәк. Ни өсөн тигәндә, был һүҙ грек теленән килә (ул «асия» формаһында теркәлгән). Ә боронғо тарихтың нәк шул греклар тарафынан яҙылып, беҙҙең көндәргә килеп етеүе бәхәс уятмай. Был үҙ сиратында донъя тарихының тәүге биттәре яҙылған замандарҙа икһеҙ-сикһеҙ дала киңлектәрендә аздарҙан да ҡеүәтле ҡәүем булмағандыр, тип уйларға нигеҙ бирә.

Йыйып әйткәндә, Орхон руник яҙмаларындағы тарихи-этнографик ҡатламға хәҙерге фән күҙлегенән ҡараш ташлау ундағы байтаҡ хәл-ваҡиғаларҙы реаль баһаларға, Беренсе һәм Икенсе Төрки ҡағанаттары осоронда тереклек иткән һәм Күк Төрк дәүләтен төҙөүҙә әүҙем ҡатнашҡан ырыу-ҡәбиләләрҙең, ҡағанат сиктәрен киңәйтеү, илде нығытыу барышында үҙ-ара өҙлөкһөҙ һуғыштар алып барған ҡәүемдәрҙең боронғо тарихын күҙалларға мөмкинлек бирә.

Беҙҙең өсөн шуныһы айырыуса мөһим: Орхон руник яҙмаларында хәҙерге көндә башҡорт халҡы составына инеп киткән табын, ҡатай, түңгәүер ырыуҙары телгә алына. Ә был иһә үҙ сиратында башҡорттарҙың бер өлөшөнөң этник тарихы Төрки ҡағанаты осорона барып ялғаныуы, тимәк, ташъяҙма ҡомартҡыға уларҙың туранан-тура мөнәсәбәте барлығы тураһында һөйләй.

*(Аҙағы киләһе һанда).*



10-2001.p65 128 02.11.01, 15:25